# «Ныҡлы ғаилә — ил терәге »



Миәкә районының Туҡһанбай ауылында йәшәүсе Хәниф менән Флүзә Дәүләтшиндарҙың иңгә-иң терәшеп, бергә-бергә тормош көтөүҙәренә 50 йыл тулды.



Дәүләтшиндар 4 балаға ғүмер бирә





Улдары Фәнис һәм Әлфис Себер
яҡтарында шофер булып эшләп
йөрөйҙәр.





Люзиә ҡыҙҙары Лянтор ҡалаһында фельдшер булып эшләһә, кесе ҡыҙҙары Люциә нефть буйынса оператор булып эшләй.



Дәүләтшиндар бөгөн оныҡтар һөйә. «Ҡартинәй», «Ҡартатай» тип өҙөлөп тороусы ейән-ейәнсәрҙәре, 1 бүләсәһе-уларҙың бәхет, шатлыҡтары.



Хәниф ағай Дәүләтшин 42 йыл механизатор булып эшләп, 2009 йылда хаҡлы ялға сыға. Унның тырышлығы тураһында бик күп грамоталары, Рәхмәт хаттары бар.



Флүзә апай медпунктта иҙән йыуыусы ла, колхоз ашханаһында ашнаҡсы ла булып эшләп, 2003 йылда хаҡлы ялға сыға.



Уның бешергән ризыктары телеңде йоторлыҡ, ҡул эштәренән  күҙҙең яуын алырлыҡ.







Хаҡлы ялда булыуҙарына ҡарамаҫтан, улар һаман да ауылда икәүләшеп гөрләтеп донъя көтәләр.





Бөгөнгө көндә улар ҡош-ҡорт аҫырай, улар үҫтергән баҡсала нимә генә юҡ.



Биш тиҫтә йылдан артыҡ ваҡыт үтһә лә, был ғаилә тормош мәшәҡәтләре араһында юғалып ҡалмайынса матур итеп ғүмер кисерәләр.